Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа №16»
городского округа город Стерлитамак
Республики Башкортостан

Рабочая программа по учебному предмету
«Родной (башкирский) язык»

Уровень: основное общее образование
Классы: 5-9
Срок реализации: 5 лет

**Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар**

**Шәхсән һөҙөмтәләр:**

•Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең башҡорт халҡының иң төп милли-мәҙәни ҡиммәте икәнен аңлау;

•Туған телгә ихтирамлы булыу, уның “бер телдән дә кәм” булмауын аңлау, уны һаҡлау, телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырға ынтылыу;

•Башҡот әҙәби әҫәрҙәрен уҡыуға ихтыяж булдырыу,

•Һүҙ байлығы булдырыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

• Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҙләштереү;

•Ишеткән һәм уҡыған мәғлүмәттәрҙең мәғәнәһен дөрөҫ аңлау;

•Төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙы тыңлап, дөрөҫ аңлау;

•Төрлө сығанаҡтарҙан (әҙәбиәт, СМИ, интернет) кәрәкле мәғлүмәттеәҙләп таба алыу, һүҙлектәр, белешмә  материалдар менән эшләй белеү;

•Билдәле темаға ярашлы материал эҙләй, таба, системалаштыра белеү, уларҙы анализлай һәм һайлай белеү;

•Йөкмткеһе, стилистик үҙенсәлектәре, тел сараларын ҡулланыуы яғынан төрлө телмәрҙәрҙе сағыштырыу, баһа бирә белеү;

•Уҡылған йә тыңланған тексты төрлө кимәлдә (тулы, ҡыҫҡартып, план формаһында) һөйләй белеү;

•Фекереңде яҙып һәм телдән иркен һәм дөрөҫ әйтә белеү;

•Башҡорт телмәр этикетын һаҡлап,ешеләр менән һәм төрлө шарттарҙа һөйләшеүҙәргә, әңгәмәләргә ҡушыла белеү;

•Телмәреңә (яҙма текстка һәм һөйләүгә) баһа бирә алыу, уны төҙәтә, камиллаштыра, редакторлай белеү;

•Аудитория алдында сығыш яһай алыу;

•Башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән алған белемдәрҙе рус теле һәм әҙәбиәте (предмет-ара кимәл) буйынса белемдәр менән сағыштыра, анализлай белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

•Телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле булыуы, телдең мәҙәниәттән айырылғыһыҙ булыуы тураһында төшөнсә алыу;

•Туған әҙәбиәттең башҡорт халҡы тормошондағы урыны, уның башҡа халыҡтар әҙәбиәттәре менән уртаҡлығы һәм үҙенсәлеге тураһында белем алыу;

•Туған тел тураһындағы фәнни мәғлүмәттәрҙе үҙләштереү, уның берәмектәренең һәм кимәлдәренең үҙ-ара бәйләнешен аңлау;

•Башҡорт теленең лексикаһын һәм фразеологияһын, орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик нормаларын үҙләштереү;

•Телмәр этикеты нормаларын белеү;

•Тел берәмектәрен, грамматик категорияларҙы таныу һәм анализлай алыу, тел берәмектәрен телмәр ситуацияһында урынлы һәм дөрөҫ ҡулланыу;

•Һүҙгә, һүҙбәйләнешкә, һөйләмгә төрлө типтағы анализ (фонетик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик, синтаксик) яһай белеү;

•Әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе рус әҙәбиәтендәгеләре менән сағыштыра, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы, үҙенсәлекле яҡтарын таный ьелеү;

•Әҙәби текстарҙы анализлағанда, туған телдең эстетик функцияһын баһалай белеү.

## Уҡыу предметының йөкмәткеһе

### 5 класс

**Фонетика**

Түбән кластарҙа тел буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. өн һәм хәреф. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре. тартынҡы өндәр. Тартынҡы өндәрҙең төшөп ҡалыуы.

**Лексика-**

Башҡорт телендә сингормонизм. Ижек. Ижектәрҙең төрҙәре. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү. Һүҙ составы. Тамыр, ялғауҙар. Тамыр һм яһалма һүҙҙәр. Нигеҙ һәм ҡушма һүҙҙәр. Тамыр һәм нигеҙ һүҙ. Интонация. Уның төрҙәре. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары. Парлы һүҙҙәр һәм уларҙың мәғәнәһе. Ялғауҙар һәм уларҙың төрҙәре. Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар. Фразеологик берәмектәр тураһында дөйөм төшөнсә. Фразеологик берәмектәрҙең барлыҡҡа килеүе. Һүҙбәйләнештәр тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәре. Иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр. Үҙләштерелгән һүҙҙәр. Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

### 6 класс

**Исем**

Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан һәм зат менән үҙгәреүе. Исемдәрҙең яһалышы. Ҡушма исемдәр. Исемдәрҙең килеш менән үзгәреше. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреүе.

**Сифат**

Сифат. Сифат дәрәжәләре. Сағыштырыу дәрәжәһе. Сифаттарҙың артыҡлыҡ һәм аҙһытыу дәрәжәләре. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифаттарҙың яһалышы. Күсереп яҙыу. Сифаттар буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Алмаш**

Алмаш. Алмаш төркөмсәләре. Зат алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Билдәләү алмаштары. Һорау алмаштары. Билдәһеҙлек алмаштары. Юҡлыҡ алмаштары. Күсереп яҙыу. Алмаш темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Һан**

Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Төп һандары. Рәт һандары. Йыйыу һандары. Бүлем һандары. Сама һандары. Һандарҙың үҙгәреше. Һандарҙың яҙылышы. Күсереп яҙыу. Һан темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

### 7 класс

**Һүҙ төркөмдәре. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

Фонетика,һүҙъяһалыш һәм морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Һүҙ төркөмдәрен айыра белеү, уларҙың грамматик категорияларын билдәләй алыу. Исемдәрҙе килештә үҙгәртә белеү, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

**Ҡылым**

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ формалары. Үҙаллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.

**Ҡылым һөйкәлештәре**

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы. Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Киләсәк, үткән, хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе,яһалышы,үҙгәреше, практик күнегеүҙәр эшләү, әҫәрҙәрҙән миҫалдар табыу.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе,практик эштәр башҡарыу,ҡулланылышын күҙәтеү.

Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше,үҙенсәлектәрен билдәләү. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы,һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе. Ҡылым һөйкәлештәре темаһы буйынса контроль диктант «Ҡарабаш турғай»

**Ҡылым төркөмсәләре**

Ҡылымдарһыҙ затһыҙ формалары; сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым.Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе. Сифат ҡылым, унда бер үк ваҡытта сифатлыҡ һәм ҡылымлыҡ мәғәнәһенең булыуы, йәғни предметтың, заттың һәм уның эше, хәрәкәте буйынса билдәһен белдереүе. Сифат ҡылымдың заман менән үҙгәреүе. Үткән заман сифат ҡылым, уның яһалышы, барлыҡта, юҡлыҡта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, уның яһалышы.

Исем ҡылым, уның эш, хәл һәм хәрәкәттең исемен атауы, яһалышы. Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы. Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе. Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү. “

Уртаҡ ҡылым, уның мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Рус телендәге уртаҡ ҡылымдың башҡорт теленә төрлө ҡылым формалары менән тәржемә ителеү мөмкинлектәрен миҫалдарҙа күҙәтеү Киреһенсә, башҡорт телендәге уртаҡ ҡылым рус теленә төрлө ҡылымдар менән тәржемә ителә алыуын практик эштәр үтәлешендә асыҡлау. Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе.

Хәл ҡылым, уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре. Хәл ҡылымдар процестың билдәһен белдереүҙәре менән рәүештәргә оҡшай, ә уларҙың барлыҡ-юҡлыҡ, күләм, йүнәлеш ялғауҙары ҡабул итеүе - ҡылымлыҡ билдәләре. Хәл ҡылымдарҙың ҡулланышы һәм дөрөҫ яҙылышы.телең үҙенсәлектәрен күҙәтеү

Ҡылым төркөмсәләренең рус теленә тәржемә  ителеү үҙенсәлектәрен күҙәтеү.

**Рәүештәр.**

Уларҙың мәғәнәләре. Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.

**Сифаттар. Һандар.**

Сифаттар. Һандар.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре**

Теркәүестәр. Уларҙың һөйләм киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгө ҡулланышын күҙәтеү. Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Бәйләүестәр. Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте.

Ымлыҡтар. Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуын асыҡлау. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең телмәрҙә ҡулланылышы буйынса морфологик-стилистик күнегеүҙәр эшләү. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең телмәрҙә ҡулланылышы буйынса морфологик-стилистик күнегеүҙәр эшләү.7-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатла

**8 класс**

**Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

Ябай һөйләм синтаксисы һәм пунктуация. Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Логик баҫым. Һөйләү маҡсаты яғынан һөйләм төрҙәре.

**Һөйләмдең баш киҫәктәре**

Эйә һәм хәбәр. Эйә, уның тәп килештә килеүе һәм башҡа һөйләм киҫәктәренә буйһонмауы. Эйә менән хәбәрҙең килеү урыны. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре**

Аныҡлаусылар, өҫтәлмәлектәр, тултырыусылар.

**Хәлдәр. Уларҙың төрҙәре**

Рәүеш хәле. Урын хәле. Ваҡыт хәле. Маҡсат хәле. Сәбәп хәле. Күләм-дәрәжә хәле. Шарт хәле. Кире хәл. Хәлдәрҙең мәғәнәләре, үҙҙәре эйәргән һүҙҙәргә бәйләнеү саралары, бирелеше. Башҡорт телендәге хәлдәрҙе рус телендәге хәлдәр менән сағыштырыу, уларҙың оҡшашлығы һәм үҙенсәлектәре.

**Ябай һөйләм синтаксисы**

Синтаксик анализ яһау күнекмәләре.

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр**

Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.

**Ике составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр**

Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Һөйләм аңлаткан мәғәнәнең тулы асыҡлығы өсөн кәрәк булған киҫәктәрҙең һөйләмдә бирелеүе.

**Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре**

Айырымланыу тураһында төшөнсә. Аныҡлаусыларҙың, өҫтәлмәлектәрҙең, хәл әйтемдәре һәм уларҙың айырымланыуы.

**Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр**

Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре. Инеш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр. Тура һәм ситләтелгән телмәр. Диалог. Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Һүҙ төркөмдәре һәм һөйләм киҫәктәре**

Төрлө типтағы ябай һөйләмдәр төҙөү. Ижади эштәр башҡарыу. Протокол төҙөү. Синтаксик-стилистик күнегеүҙәр башҡарыу.

**9 класс**

**Фонетика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә.Ҡушма һөйләм һәм уның төрҙәре.Теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр.

Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.

Баш һәм эйәрсән һөйләм.

**Ябай һөйләм синтаксисын ҡабатлау.**

Бер составлы һөйләмдәр. Билдәле эйәле һөйләм. Билдәһеҙ эйәле һөйләм. Дөйөм эйәле һөйләм. эйәһеҙ һөйләм. атама һөйләм.

**Ҡушма һөйләм синтаксисы.**

Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Эйәртеүле ҡушма һөйләм.

**Эйәрсән һөйләм төрҙәре**

(эйәрсән эйә һөйләм, эйәрсән хәбәр һөйләм, эйәрсән аныҡлаусы һөйләм, эйәрсән тултырыусы һөйләм, эйәрсән хәл һөйләмдәр,эйәрсән урын һөйләмдәр, эйәрсән рәүеш һөйләмдәр, эйәрсән сәбәп һөйләмдәр, эйәрсән маҡсат һөйләмдәр, эйәрсән шарт һөйләмдәр).

Эйәрсән эйә һөйләм, уның баш һөйләмдең эйәһе урынында килеүе,йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән эйәне асыҡлауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Рус теленә тәржемә ителеше.

Эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәр ,уларҙың баш һөйләмдең аныҡлаусы урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән аныҡлаусыға ҡарауы, уларҙың баш һөйләмгә бәйләнеү саралары , тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге эйәрсән аныҡлаусы һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән тултырыусы һөйләм, уның баш һөйләмдең тултырыусыһы урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән тултырыусыға ҡарауы,баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән хәл һөйләмдәр. Эйәрсән ваҡыт һөйләм, уның баш һөйләмдең ваҡыт хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән ваҡыт

хәлен асыҡлауы. Ваҡыт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән урын һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән урын хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге урын хәле урынында килеүе. Урын һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Башҡорт телендәге урын һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән рәүеш һөйләмдәр. Улар баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән рәүеш хәлен асыҡлайҙар, йә баш һөйләмдең рәүеш хәле урынында киләләр. Эйәрсән рәүеш һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы. Эйәрсән рәүеш һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.

Эйәрсән сәбәп һөйләм, уның баш һөйләмдеңсәбәп хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдә мөнәсәбәт һүҙе менән килеп бирелгән сәбәп хәлен асыҡлауы. Эйәрсән сәбәп һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән маҡсат һөйләм, уның баш һөйләмдә мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән маҡсат хәлен асыҡлауы, йә баш һөйләмдәге маҡсат хәле урынында килеүе. Эйәрсән маҡсат һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән күләм – дәрәжә һөйләм, уның баш һөйләмдә күләм – дәрәжә хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән күләм – дәрәжә хәлен асыҡлауы. Эйәрсән күләм – дәрәжә һөйләмен баш һөйләмгә бәйләүсе саралар.

Эйәрсән шарт һөйләм, уның баш һөйләмдәге шарт хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән күләм – шарт хәленә ҡарауы. Эйәрсән шарт һөйләмдәрҙе баш һөйләмгә бәйләүсе саралар,тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

Эйәрсән кире һөйләм, уның баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән кире хәлгә ҡарауы, йә баш һөйләмдәге кире хәл урынында килеүе. Эйәрсән кире һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, тыныш билдәләренең ҡуйылышы.

**Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр, төрҙәре**

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында төшөнсә: тиң эйәрсән һөйләмле һәм тиң булмаған эйәрсән һөйләмле, күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙағы тыныш билдәләре.

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре.

Теҙемдәр.

Уларҙың йә тиң киҫәктәре, йә тиң һөйләмдәре күп булыуы һөҙөмтәһендә ҡатмарландырылған ябай йәки ҡушма һөйләм булыуы. Теҙемдәрҙең төрө, төҙөлөшө, уларҙың составында һанау һәм йомғаҡлау бүлеген барлыҡҡа килтереүсе конструкцияларҙың булыуы.

## Тематик планлаштырыу

| Бүлек темаһы | Кластар | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **5** | **6** | **7** | **8** | **9** |
| Фонетика | 6 | | | | 7 |
| Лексика | 28 | | | | |
| Исем | | 7 | | | |
| Сифат | | 7 | 2 | | |
| Алмаш | | 9 | | | |
| Һан | | 11 | | | |
| Һүҙ төркөмдәре | | | 4 | | |
| Ҡылым | | | 3 | | |
| Ҡылым һҡйкәлештәре | | | 11 | | |
| Ҡылым төркөмсәләре | | | 6 | | |
| Рәүеш | | | 1 | | |
| Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре | | | 7 | | |
| Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | | | | 2 | |
| Ябай һөйләм синтаксисы | | | | 4 | 2 |
| Һөйләмдең баш киҫәктәре | | | | 3 | |
| Хәлдәр. Уларҙың төрҙәре | | | | 5 | |
| Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре | | | | 2 | |
| Тиң киҫәкле һөйләмдәр | | | | 3 | |
| Ике һәм бер составлы һөйләмдәр | | | | 8 | |
| Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре | | | | 3 | |
| Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр | | | | 2 | |
| Һүҙ төркөмдәре һәм һөйләм киҫәктәре | | | | 2 | |
| Ҡушма һөйләм синтаксисы | | | | | 6 |
| Эйәрсән һөйләм төрҙәре | | | | | 11 |
| Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр | | | | | 8 |
| **Бөтәһе:** | **34** | **34** | **34** | **34** | **34** |